Р. ҒYМӘРОВ һүрәте

Башҡортостандың Тәтешле, Бәләбәй райондарында яңы нефть сығыу урыны асылды. (Газеталарҙан).

— Тыуған көнең менән ҡотлайым, балаҡай.

һ ә н ә к

№ 2 ӨФӨ 1956 йыл Февраль Беренсе йыл сыға. Хаҡы 1 һум 25 тин.

Елә оскан һүҙ

Һәнәктең шундай ғәҙәте бар: ул „әйткән һүҙ — аткан ук", — тигән мәкәлде ярата. Ә бына Оло Тәләктә һүҙенә хужа була алмаусы директор барлығын ишеткәс, Һәнәк шунда юл тотто.

Бөтәһен дә ентекләп карарға кәрәк, тип, МТС-тың ремонт мастерскойы алдында туктальп ергә каҙалыуы булды, вак-төйәк тимер-томор күтәреп, кайҙандыр шаулашып кайтып килеүсе бер төркөм егеттәр уны һырып та алдылар. Күрәһең, уны ябай тимер һәнәккә һанаптыр инде, күҙҙәрен йылтыратып карай ҙа башланылар.

— Һабы ла яңы бының, — тине араһын берәү. Икенсеһе быңдай баһа өсөн иптәшен кыҙҙырып алып китте:

— Һабы ни шайтаныма! Тимере киммәт беҙгә, тимере... бер ямауға ярар ине...

МТМ мөдиренең тәҙрә кағып сакырыуын ишеткәс, улар ашығып мастерскойға инеп киттеләр.

— Иһи-һи, тимер эҙләп тилмерәләр икән былар, тип уйланы Һәнәк һәм был хужалык менән танышып йөрөгәндә уның бикле торған клубының сәхнәһенә сығып һөйләһәң дә хурлыкка калдырмаслык **диалогтарҙы,** ҙур ғына бер **монологты** һәм **йомғаклау һүҙен** ишетте:

Диалогтар (йәғни МТМ мөдире Миронюк менән ремонт эшселәре араһында көндәлек ғәҙәт буйынса әйткеләшеп алыуҙар):

— Рәтле әйбер тапманығыҙмы?

— Әҙерләп куйғандар ти унда!

— Шаулашмағыҙ әле! Һин, Хәбирьянов, әҙерләп куймағандарын белеп киттең бит!

— Туйҙырҙы инде ташландык тимер өйөмдәрендә актарыныу!

— Бәй, һеҙ мин әйтеп ебәргән урындарға барманығыҙмы ни?

— Һәй, Владимир Петрович, үҙең дә бөтә сүплек баштарын йөрөп сыктың бит инде!..

Монолог (йәғни МТС директоры Белявцевтең баш инженер, МТМ мөдире һәм башка етәксе берәмектәр алдында һөйләнмәгән телмәренән өҙөк).

— Ремонт өлкәһендә көҙ әйткән һүҙебеҙ кышкылык өсөн дә үҙ көсөндә кала: уйлап табырға, эҙләп табырға, нисек тә ямаулыкка ярарлык, запас частәр яһарлык материал табырға! Ошо лозунг менән рухланып өс-дүрт айҙан кәмерәк вакыт эсендә лә 37 трактор ремонтланыкмы беҙ? Ремонтланык. Йыллык планды 46 процентка үтәнекме? Үтәнек. Оло Тәләк МТС-ы кеүек элек-электән койрокта һөйрәлеүсе хужалык уҙған йылдарҙың кайһыһында быңдай гүзәл еңеүгә өлгәшкән?! Һуңғы өс йыл эсендә миңә тиклем алышынған өс директорҙың кайһыһының төшөнә ингәне бар быңдай эш?! Был урында уҙған йылғы эшегеҙҙе иҫкә төшөрөп, ихахайлап көлмәйенсә лә түҙеп булмай. Ремонт эшен яҙға калдырғанһығыҙ, ете-е!.. тракторҙы һабанға төшкәс бураҙнала ремонтлап әҙәм көлдөргәнһегеҙ бит. Әлбиттә, әлбиттә, беҙ ҙә бына хәҙер көтмәгәндә генә килеп төртөлдөк. Февраль аҙағы етеүгә карамаҫтан, мактанырлык итеп бер генә трактор ҙа ремонтлай алманык. Сөнки уҙған йылдарҙан калған запас частәребеҙ ҙә бөттө, реставрация мәсьәләһе лә ике аяклап акһай. Эйе, реставрация... Реставрация — беҙҙең төп бурысыбыҙ булып кала. Материал юк тиһегеҙме? Материалды эҙләргә, табырға, нисек тә табырға кәрәк тип әйтелгән лә баһа! Һылтанырға сәбәп табайым тиһәң табып була ул. Әйтәйек, тауары булғанда аксаһы, аксаһы булғанда тауары юк. Юлдарҙы ла кар баҫып китте — запас частәр алырға Өфөгә нисек бармак кәрәк?! Экспедиторыбыҙ Ғәниев айына бер гайка ватығы ла кайтарта алмай икән, бында ла шул кышкы бурандарҙан башка кемде ғәйепләйһең инде. Үҙебеҙ барған хәлдә лә һиңә кәрәкте әҙерләп кенә тормайҙар бит әле...

Йомғаклау һүҙе (уны Һәнәк яуаплы иптәштәрҙең яуаплы ауыҙҙарынан ишетермен тип уйлағайны ла, уларҙың һүҙ уйнатыуҙан бушамауҙарын, бөгөнгө хәлдән бөгөн йомғак яһарға ашыкмауҙарын күреп, үҙе һүҙ алырға булды).

— Һеҙ, хөрмәтле Белявцев, „һүҙ менән тирмән тарттырып булмай", — тигән мәкәлде хәтерләйһегеҙме? Шулай булғас, аҙырак һөйләп, бөгөнгө өҙөклөктән сығыу өсөн конкрет саралар эҙләп карар инегеҙ. 37 трактор тип күкрәк kағаһығыҙ ҙа бит, уларҙың еңел ремонт талап иткән машиналар ғына икәнлеген һеҙҙең МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙағы тауыктар ҙа белә торғандыр. Ә капиталь ремонтка инергә тейешле гусеницалы тракторҙарҙың кайһыһы кайҙа кар аҫтында ятыуын берәмләп һанап сығырға кәрәкме әллә? Ремонт өсөн акса юк тип әйтергә үҙегеҙҙең дә телегеҙ бармаҫ. Әле ғинуар башында ғына республиканың ауыл хужалығы министренә килеп, ялынып-ялуарып, мең дә бер вәғәҙә биреп, йөҙ мең урынына йөҙ утыҙ мең һум акса алып китеүегеҙҙе, шәт, онотмағанһығыҙҙыр. Шул аксаны тауарға әйләндереү—сельхозснабтан запас частәр алыу, алғанды үҙегеҙгә кайтарыу һәм, күп һүҙҙең хатта китапка ла якшы түгел икәнлеген аңлап, колас йәйеп эшкә тотоноу директорҙың бурысы икәнлеген онотмағыҙ инде...

Йомғаклау һүҙен осларға торған сакта ғына йәш Һәнәктең башына келт итеп тағы бер уй төштө.

— Ауыл хужалығы министрен дә телгә алырға кәрәк түгелме икән? — тине ул, үҙ-үҙенә, — юғиһә иптәш Веретинников ремонтка акса өләшеп биреүҙе белә, ә ул ҙур суммаларҙың ни нәмәгә тотолоуын кайһы вакыт тикшереп тә карамай.

Һәнәк һүҙенән яҙып алыусы **F. Әхмәтшин.**

ЯҢЫ ЕТӘКСЕ КИЛГӘС

А. БАРАНОВ һүрәте.



Эште үҙгәртеп корам тине... ...һәм корҙо

А. ШТАБЕЛЬ һүрәте.
(Стәрлебаш районынан Ғ. ҒУМӘРОВ темаһы.)

ҺЫНЫҠҠА ҺЫЛТАУ ТАБЫЛА...

КОЛХОЗ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ:
И...һи...һи... туғандар, баҫыу тулы ҡар икән, ашламалар сығарыуҙың ни кәрәге бар икән?.

Иҫәпкә бар-һанға юк

(Оптимистик комедия)

Ваҡиға Балтач районы Ленин исемендәге колхозда бара. Правление ултырышы дауам итә. Ултырыштың тәүге өлөшөндә булырға һунға ҡалһаҡ та, унда ҡатнашыусыларҙы исемләп әйтеп китәйек: председателлек итеүсе, колхоз агротехниге В. Сәитов, 1-се бригада бригадире Ә. Солтанов, 2-се һәм 4-се бригада бригадирҙәре, 3-сө бригада бригадире М. Әхмәтьянов, счетоводтар һәм башҡалар.

Көн тәртибендәге мәсьәлә: „Яҙғы сәсеүгә әҙерлек."

Сәитов (информация яһайым, тигән булып ике сәғәт буйы һөйләй)... Маҡтанып әйтмәйем, иптәштәр, быйыл тәбиғәт үҙе лә беҙҙең агрономия яҡлы. Баҫыуҙың теләһә ҡайһы участкаһына барып ҡарағыҙ: ҡар ҡапламаған ер таба алмаҫһығыҙ. Бына кисә генә Сәләхиҙәр һаламға барғайнылар ҙа — буш ҡайттылар. Баҫыуға инерлек түгел, ат ҡолағына тиклем бата, ти. Ҡыҫҡаһы шул: иртәгә үк районға „1 200 га ергә ҡар тотолдо" тип сводка ебәрергә кәрәк. Так что кәрәктәр күтәреп, ҡар тотабыҙ! имеш, тип бәлтерәп йөрөйһө лә юк. Тәбиғәт ике ҡулын һуҙып, ярҙам итәм, тип тора икән, беҙ уны аҡыл менән, оҫта файҙаланырға тейешбеҙ. Дальше!.. Быйыл беҙҙең, иптәштәр, 12 тонна ашлама ҡайтараһы бар, бер килограмм да ҡайтмаған әле. И не обязательно ла, ни өсөн тиһәң, потому что беҙҙең үҙебеҙҙә ашлама сколько угодно. Бына мин бөгөн счетоводствонан сводка алдым, тыңлағыҙ, улар йыйнағандар:

1-се бригада, көл — 291 центнер, ҡош тиҙәге — 194 центнер.

2-се бригада, көл — 283 центнер, ҡош тиҙәге — 183 центнер.

3-сө бригада тураһында аҙаҡтаныраҡ специально туҡталырмын, иптәштәр.

4-се бригада, көл — 285 центнер, ҡош тиҙәге — 184 центнер.

Күрәһегеҙ, был бригадаларҙа эш гөрләп тора тиергә мөмкин. Бөгөн счетоводствонан сводка алғас, үҙемдең дә иҫем китте, иптәштәр: 3-сө бригада бригадире Әхмәтьянов бөгөнгөһө көнгә ни бары 53 центнер генә көл 42 центнер генә ҡош тиҙәге йыйған! Позор! Ултыра, ҡыҙармай ҙа бит, исмаһам. Тимәк, оят юк тигән һүҙ. Әллә сводканы кәметеп бирҙеме икән тип, үҙем специально барып тикшерҙем. Ни эшләтәһең, юк бит, дөрөҫ биргән шундай позорный сводканы. Яуап бирергә әҙерләнеп ултыр, иптәш Әхмәтьянов! Почему шулай? Армиянан ҡайтыуың булды — бригадир итеп билдәләнек. Һине шулай план өҙөү өсөн воспитать иттеләрме ни, ә? Районға ни тип сводка бирербеҙ хәҙер? Ҡыҫҡаһы шул, иптәштәр, Әхмәтьяновҡа шелтә бирергә, чтобы эшендә крутой поворот яһаһын!..

Ҡара тиреҫ сығарыуға килгәндә, иптәштәр, бер килограмм да сығарылмаған әле. Был эшкә ең һыҙғанып специально үҙем тотонасаҡмын. Сей тиреҫ 1120 центнер сығарылды. Конный дворҙар ҡырына 4 урынға өйөлгән. Ҡыҫҡаһы шул: эш Әхмәтьяновта ғына тора, иптәштәр!.. Һүҙем бөттө.

Председателлек итеүсе. Яуап бирегеҙ, иптәш Әхмәтьянов! Почему планды өҙәһегеҙ, ә? Почему башҡа бригадирҙәрҙән өлгө алмайһығыҙ?

Әхмәтьянов. Бында минең турала әйтелгәндәр бөтәһе лә дөрөҫ, иптәштәр. Мин ысынлап та 53 центнер көл һәм 42 центнер ҡош тиҙәге йыйҙым. Ләкин мин планды үтәргә һүҙ бирәм, иптәштәр. Мине башҡа бригадирҙәрҙән өлгө алырға саҡыраһығыҙ. Мин уларҙан нисек өлгө алайым? Мин йыйылған көлдө иләп, складка тултыра барам. Ҡош тиҙәге лә бер урынға йыйыла. Ә башҡа бригадирҙәр бындай мәшәҡәттән бик оҫта ҡотолалар. Улар барыһы ла „һәр хужалыҡтағы усаҡтар һанынса фәлән тиклем көл, тауыҡтар һанынса фәлән тиклем ҡош тиҙәге булырға тейеш" тип кенә сводка бирҙеләр бит. Ә мин усаҡҡа ҡарап учет алмайым, ә складка йыйылған көлгә ҡарап учет алып барам. Инде ҡара тиреҫ сығарыу буйынса әйтәйем. Ниңә үҙегеҙ тотонаһығыҙ, иптәш Сәитов, һеҙҙең былай ҙа эшегеҙ күп. Беҙгә ҡара тиреҫ сығарырға урын ғына күрһәтегеҙ, иртәгәнән үк сығара башларбыҙ. Сей тиреҫ тураһында ла шул. Һеҙ конюхтәр түккән тиреҫте иҫәпкә алғанһығыҙ. Ат аҫтына ҡаты була, тип аптырауҙан ғына түгәләр бит ул тиреҫте. Ә фермаларҙа тиреҫте тәҙрәнән генә ташлайҙар.

Сәитов. Етеп торор, иптәш Әхмәтьянов, үҙеңде аҡларға тырышма. Ултыр урыныңа!.. Н-да, районға сводка кәрәк, иптәштәр, сводка!

Солтанов. Миңә һүҙ бирегеҙ әле, иптәштәр. Әйе, беҙҙе „учетҡа ғына алалар" тип аҡланырға тырышты, Әхмәтьянов. Ниңә, учет насар эшме ни? Бына минең бригадала 97 хужалыҡ. Тимәк, һәр усаҡҡа 3 центнер көл, в среднем һәр йортҡа 10 тауыҡ булһа, 2 центнер ҡош тиҙәге тура килмәйме, ә?

Сәитов. Әлбиттә, шулай!

Солтанов. Шулай булғас, 291 центнер көл бармы, бар! 194 центнер ҡош тиҙәге бармы? Бар! Йыйып ҡына алаһы бар уны. Унан һуң ҡара тиреҫ мәсьәләһенә килгән ваҡытта, ул эште иптәш Сәитов үҙе ҡулға алмаҡсы булды инде. Так, сей тиреҫ мәсьәләһенә килгәндә, ниңә конюхтәр түккән тиреҫте иҫәпләмәҫкә? Түгә бирһендәр. Быйыл булмаһа, бер нисә йылдан һуң бер нисә урында ҡара тиреҫ запасы өйөлөп торасаҡ тигән һүҙ бит был, йәмәғәт...

Әхмәтьянов. Иптәштәр, улай булһа миңә һүҙ бирегеҙ әле. (Ул Солтанов һөйләгән ваҡытта блокнотында нәмәлер иҫәпләп ултырҙы). Минең бригадала 93 хужалыҡ, йәғни 93 усаҡ. Һәр усаҡҡа 3,5 центнер көл тура килһә, 325,5 центнер көл бармы? Бар! Һәр хужалыҡҡа 12-шәр тауыҡ, 2 ҡаҙ, 2 өйрәк һәм бер күркә тура килһә, 3-әр центнер ҡош тиҙәге тигән һүҙ ул. 279 центнер ҡош тиҙәге бармы? Бар! Тимәк, минең план 180 процентҡа үтәлә.

Сәитов (шатланып). Булды ғына! Молодец, Әхмәтьянов! Хәҙер үк счетоводка сводка бирегеҙ! Мороноңа сирттеме, Солтанов, ә? Ха-ха-ха...

Солтанов. Туҡтағыҙ әле, иптәштәр! Мин бит һәр усаҡҡа 3-әр центнер генә иҫәпләнем. Шуның өҫтәүенә минең бригадала тимер мейестәр ҙә бар...

Көндәр шулай уҙа, һүҙ һөйләнә, ә эшләнгән эш иҫәпкә бар — һанға юк.

Р. Мөхәмәтов,
Н. Сәитов.

В. ПОНОМАРЁВ һүрәте.

Көйөргәҙе райпотребсоюзы балалар саңғыһына ололар саңғы таяғы һәм ололар саңғы кайыщы кушып һата.

(Хәбәрселәр хатынан).

РАЙПОТРЕБСОЮЗ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ:

Борсолма, бала, борсолма, күҙ-йөш ҡойоу яман булыр.
Буйға миндәй үҫеп еткәс, аяғың да, таяғың да таман булыр.

Радиофикация һәм АГИТАЦИЯ

Ҡатнашалар:

Б а б а й, 70 йәштә.
Комсомол ойошмаһы секретаре, йәш ҡыҙ.

Ваҡиға 1956 йылдың баштарында урман эшселәренең Симка поселкаһында бара. Тирә-яҡта урман да тау. Бында хатта ҡоштар ҙа һирәк осоп килә, ә ВЛКСМ-дың Нуриман райкомы работниктәре бөтөнләй килмәй.

Б а б а й (клубҡа инә, бүркен һалып). Ниңәлер, ҡыҙым, өйҙәргә радио үткәреү эше һуҙыла бит әле.

Секретарь. Тиҙҙән узел эшләй башлар инде... Бүркеңде кейер инең, бабай, һыуыҡ бит.

Б а б а й. Бәй, яҡмайһығыҙмы ни?

Секретарь. Утын юҡ. Кисә Өфөнән лектор килгәйне, контораһан үтескә бер ҡосаҡ утын алып торҙоҡ.

Б а б а й. Һи-һи-һи. Урманда йәшәп, утын юҡ, тигәндәй.

Секретарь (бабай һүҙенә иғтибар итмәй, үҙенекен һөйләй). Бер ниндәй сара ла үткәреп булмай клубта. Бейер инек, гармунсы юҡ...

Б а б а й. Һи-и. Радиоприемниккә лә бейеп була бит. Миндә бына «Родина» тигән приемник бар. Бик шәп!

Секретарь. Бабай, мин дә берәй барып сығайым әле радио тыңларға.

Б а б а й. Һин генә барып тыңлауҙан ни файҙа? Бына клубҡа тиҙерәк радио үткәрегеҙ, халҡ тыңлаһын. Радио тыңлаһаң — йән рәхәтләнеп китә.

Секретарь. Дөрөҫ, бабай. Беҙ радиофикация тураһында агитация башланыҡ инде.

Б а б а й (ҡыҙып). Нимә? Ниндәй агитация? Бысағыма кәрәкме ни ул һинең агитацияң? Техник-радистәрҙең килеүенә икенсе ай бит инде. Әле булһа шунда буталып тик йөрөйҙәр. Ниңә шулай?

Секретарь. Бағана ултыртмайҙар. Бағана юҡ, ти. Диспетчер бүлмәһен радиоузелға бүлеп алырға ла таҡта юҡ.

Б а б а й (ҡысҡырып). Ә? Уныһы ни тигән һүҙ тағы?

Секретарь (тапанып). Әллә, мин ҡайҙан беләйем.

Б а б а й (асыулы, әрнеүле тауыш менән). Шул-шул, белмәйһең. Комсомол дәрте юҡ һеҙҙең йөрәктә. Мин — ҡарт кеше, ун бер соҡор ҡаҙып, ун бер бағана ултырттым. Үҙем өсөнмө ни? Юҡ, халҡ өсөн. Ә һеҙҙең Палушкин менән Мөфтиев кеүек комсомолецтәрегеҙ ҡыл да ҡыймылдатманылар. Кемгә кәрәк һуң ул радио? Дәрт юҡ, дәрт... Тапҡандар... диспетчер бүлмәһен радиоузел яһарға. Айырым бина һалып булмайҙыр шул...

(Секретарь башын түбән эйә.)

Ш а р ш а у

Авторҙан. Һүҙҙе ошонда туҡтатып, лесопункт начальнигы Бәшәров иптәшкә мөрәжәғәт итәйек. Ул: «Диспетчер бүлмәһен радиоузелға бүлеп алырға таҡта таптыҡ инде, радиоузел тиҙҙән эшләй башлар, тик беҙҙә радиомеханик юҡ бит әле»,— ти.

С. У р м а н о в.

СӘҒӘТ БӘЛӘҺЕ

Күптән түгел Маҡар сельпоһына стена сәғәттәре килде. Шул айҡанлы һатыусылар менән алыусылар араһында ошондай һөйләшеүҙәр булды.

Алыусы. Маятниктәре ҡайҙа һуң?

Һатыусы. Юҡ. Үҙегеҙ генә яһап ҡуйығыҙ. Вазелин, крем һауыттарынан киҫеп яһап була бит инде.

Аҡыллы кәңәш буйынса төрлө ҡалай-һалайҙан маятниктәр яһалды, сәғәттәр стеналарҙа келт-келт талпына башланылар. Әммә сәғәттең вазифаһы келтелдәп тороуҙа ғына түгел бит әле. Ул ваҡытты дөрөҫ күрһәтергә тейеш. Аптыраған хужа сельпоға барҙы.

Алыусы. Дөрөҫ йөрөмәй бит, ни хәл итәбеҙ?

Һатыусы. Юҡҡа иҫегеҙ киткән икән. Артҡа ҡалһа — ауыртмаҡ өҫтә. Иҫке йоҙаҡ, ҡайсы, сүкеш һымаҡ тимер-томор бөткәнме ни. Алға китә башлаһа — ауыртмаҡты кәметә төш. Бына һиңә дөп-дөрөҫ сәғәт.

Ләкин хужа күпме генә аҙапланһа ла сүкеште сәғәткә әйләндерә алманы.

«Был бәләнең сере ҡайҙа һуң?» — тиерһегеҙ. Шунда: Маҡар райпотребсоюзы сәғәттәрҙе бер сельпоға, маятниктәрен — икенсе сельпоға ебәргән. Райпотребсоюз етәкселәре Воробьев һәм Ғәйнуллин иптәштәрҙең үҙ сәғәттәренә сүкеш элеп ҡуйғанда сәғәт алыусыларҙы, бәлки, былай яфаламаҫтар ине.

Ғ. Кәримов.

Белдереү

Газета-журналдар алыусылар, хат яҙыусылар һәм хат көтөүселәр иғтибарына.

Шишмә районының Иҫке Муса связь бүлеге газета-журналдарҙы, хаттарҙы, переводтарҙы һәм посылкаларҙы хужаларына һәм подписчиктәргә аҙнаһына бер генә тапҡыр тапшыра.

Юғарыла әйтелгәндәрҙе иҫкә алып, ваҡытлы-ваҡытһыҙ теңкәмә тейеп йөрөмәүегеҙҙе һорайым.

Иҫке Муса связь бүлеге начальнигы
Ф. Уразаева.

ҺӘНӘК: Был белдереүҙе Шишмә район связь контораһы начальнигы иптәш Мамлиев уҡыр һәм серенә төшөнөр тип ышанабыҙ.

ӨФӨ НОВЕЛЛАЛАРЫ

Улар өсәү ине: журналист, кооператор, нефтсе. Улар ашханала ултыралар, бер-берен гуляш менән, «Арзни» тип аталған минераль һыу менән һыйлайҙар һәм урындағы эшем кешеләренең, хужалыҡ работниктәренең тормоштары тураһында хикәйәт һөйләйҙәр.

— Тыңларға теләйһегеҙме? Мин һеҙгә маневр паровозы, «Аҡбаш» һәм киң ҡоласлы кеше тураһындағы тарихте һөйләйем,— тине журналист.— Уның фамилияһы—Овечкин. Ул Черниковск ҡалаһында йәшәй, Железнодорожная станцияһында дежурный булып эшләй. Бына шул Овечкин киң ҡоласлы кеше лә һуң инде! Бер ваҡыт эш өҫтөндә уның төшөрөп алғыһы килә. «Аҡбаш» алырға ул кемде ебәрә, беләһегеҙме?

— Курьерҙе! — тип әйтә һалды нефтсе.

— Фантазияң бик һай.

— Автомашина? Дрезина ебәрә?

— Па-ро-воз!

— М-да! Был ысынлап та киң ҡолас! Паровоз паркын ҡара һин нисек файҙаланған, ә? — тине нефтсе.

— Овечкин — мәктәп йәшенә инмәгән, яңы тәпәй йөрөгән бала ғына! — тип бик ҡаты көлдө кооператор. Киң ҡолас мәсьәләһенә уға «Роспотребсоюз»дан өйрәнергә кәрәк ине. Әйткәндәй, һеҙ ишәк, ишәк эйәре һәм «Роспотребсоюз» тураһындағы хикәйәтте беләһегеҙме? Бик ҡыҙыҡлы хикәйәт ул!.. Бер ваҡыт «Башпотребсоюз» Мәскәүҙән: һеҙгә мең дана ишәк һәм ат эйәрҙәре ебәрелә тигән хәбәр алды. «Гәжәп хәл,— тип уйланыҡ беҙ.— Улай булһа Башҡортостанға фил югәндәре ебәреүҙәре лә мөмкин. Һуң беҙҙә филдәр булмаған һымаҡ ишәктәр ҙә юҡ та баһа! Шуның өҫтәүенә башҡорттар ат өсөн дә йөк эйәре ҡулланмайҙар.

Беҙ үҙ фекеребеҙҙе ашығыс рәүештә «Роспотребсоюз»ға хәбәр иттек. Беҙгә начальство, аҡыл һатмағыҙ, тип кенә яуап ҡайтарҙы. Йәнәһе, эйәре булғас, ишәге табылыр әле, тимәксе булалар инде.

Беҙ бөтә райондарҙы тикшереп ҡараныҡ. Ишәк юҡ. Бер ваҡыт шулай ҙа өмөт саткыһы йылтырап ҡалды. Беҙгә Өфөләге паркта балаларҙы ултыртып йөрөтә торған ишәк бар, тип хәбәр иттеләр. Паркка югерҙек. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ундағы берҙән-бер ишәк тә аяҡ һуҙған икән шул... Уның да өс эйәре тороп ҡалған.

Бәлә шулай итеп беҙгә килде лә, китергә лә уйламаны,— ул хаҡта һөйләп тораһы ла юҡ инде. «Роспотребсоюз» ул эйәрҙәрҙе беҙгә ебәрҙе. Үҙ сиратыбыҙҙа беҙ ҙә райондарға бүлеп бирҙек.

— Туҡтағыҙ әле, ә бында киң ҡоластың ни ҡыҫылышы бар? — тип аптыраны нефтсе.

— Һуң әле тыуып өлгөрмәгән бер быуын ишәктәрҙе эйәр менән тәьмин итеү «Роспотребсоюз»дың сауҙа өлкәһендәге киң ҡоласы түгелме ни?

— Шулай ҙа ишәк ваҡиғаһы миңә әллә ни тәьҫир яһай алманы,— тине нефтсе.— Мең эйәр хаҡы йөҙәрләгән мең һум тора. Ләкин беҙҙе быны менән генә хайранға ҡалдыра алмаҫһың!

— Ә һеҙҙе нимә менән хайранға ҡалдырырға һуң?

— Күрәһең, миңә парафин, хикмәтле пожарник һәм беҙҙең главка тураһындағы тарихте һөйләп бирергә тура килер инде. Әйткәндәй, һеҙ парафиндең нимә икәнлеген, уны нисек ашарға кәрәклеген беләһегеҙме?

— Парафин нефттән сыға булһа кәрәк,— тине журналист.— Ул текстиль, шырпы, электротехника промышленносендә һәм башҡа производстволарҙа ҡулланыла.

Доп-дөрөҫ. Һүҙҙе шунан башлайым: Туймазы промыслаларында парафин массаһы бик күп йыйылған. Ошо ҡиммәтле сырье беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа һәләк була. Уның менән бер кем дә ҡыҙыҡһынмай... тип әйтер инем дә, ғәфү итегеҙ, пожарниктәр ҡыҙыҡһына.

Ут эшмәкәрҙәре парафиндә учение уҙғаралар. Парафин яҡшыраҡ янһын өсөн бер мискә бензин һибәләр ҙә, саф-саф булып, ут һәм төтөн эсенә ташланалар, учение мөғжизәләре, янғынға ҡаршы көрәш оҫталыктары күрһәтәләр.

Ләкин беҙ парафиндең файҙаһы бер брандмайор әйткәнсә «ысын янғынға бик яҡынайтылған ут обстановкаһы» тыуҙырыу менән генә сикләнмәүен аңлайбыҙ. Был хаҡта беҙ «Главвостокнефтедобыча»ға яҙғайныҡ. Парафин массаһын таҙартыу һәм уны тәүге тапҡыр эшкәртеү буйынса ябай ғына королма яһау өсөн аҡса ла һорағайныҡ. Беҙ инде мәсьәлә бик ябай хәл ителер: үҙебеҙҙә парафин эшләтәбеҙ, уны йәшниктәргә тултырабыҙ ҙа заказчиктәргә ебәрәбеҙ, тип уйлағайныҡ. Уларға сырье, беҙгә файҙа. Шәп бит?

Ләкин кабинеттарҙа ултырыусы аҡыллы баштар беҙҙең фекерҙе хупламанылар. Улар, теләгегеҙ бик ҙур икән, былай ғына эшләгеҙ, ярҙамһыҙ ғына, тип кәңәш бирҙеләр. Аҡсаны ла, механизмде лә, тараны һәм заказчиктәрҙе лә, башҡаһын да беҙ үҙебеҙ эҙләп табырға тейеш булдыҡ. Бына шулай кустар юл менән эш алып барабыҙ инде. Бер нисә заказчик табып алдыҡ, уларға парафин ебәрәбеҙ. Ләкин был диңгеҙҙәге бер тамсы ғына бит...

— Ҡарағыҙ әле,— тине кооператор,— мин бында киң ҡоласлы кешеләр тураһындағы хикәйәт күрмәйем бит әле.

— Беҙҙә күпме парафин массаһы бар тип уйлайһығыҙ? — тип һораны нефтсе.— Ун мең тонна!

— Ун мең!— тип аптырап ҡалды журналист.— Ниндәй юнһеҙлек был!

— Эйе, эйе. Ләкин ул беҙҙә генә шул тиклем. Ә йәнәшәләге Собханғол нефтепроводуправлениеһендә ерҙе ҡаҙып һалынған соҡорҙа өгерме биш мең тонна самаһы һаҡлана!

Журналист менән кооператор:

— Бөтәһе утыҙ биш мең! — тип ҡысҡырып ҡуйҙылар.

— Ҡабатлап әйтәм: беҙҙә генә шул тиклем,— тип дауам итте нефтсе.— Әгәр ҙә Башҡортостандағы, Татарстандағы бөтә промыслаларҙы алғанда...

Тынлыҡ урынлашты. Ишәк эйәрҙәре тураһындағы тарих бөтөнләй бәләкәй генә булып тороп ҡалды.

Унарлаған мең тонна ҡиммәтле продуктыны ергә күмеп, ерләп ҡуйыс! Бына был ысынлап та киң ҡолас! Һарауһыҙ хужа ҡоласы!

Беҙ был хаҡта «Арзни» бутылкаһы янында һөйләнеп кенә ҡалмаҫка кәрәк, тип уйланыҡ. Был тема өҫтәл янында әңгәмә рамкаһынан ситкә сыға. Хәйер, ниндәй өҫтәл янында әңгәмә алып бараһың бит. Беҙҙеңсә, был тема Нефть промышленносе министерствоһы коллегияһының өҫтәле янында бик уңышлы яңрар ине.

С. Шатров

Башҡортостан АССР-ы.

(«Крокодил», № 6, 1956)

З. ҒӘЛИМОВ һүрәте. (Стәрлебаш районы).



Һалған эшкә кар яуа...

Ғ. ИМАШЕВА һүрәте.

Яҡташтарҙың илде гизеп
Йөрөгән саҡтары бар,
Ҡайтҡаны бар Мәскәү, Киев
Һәм Ташкент яҡтарынан.
Зәңгәр Балтик буйҙарында,
Киң Себер ҡырҙарында,
Беҙҙең бейеү һәм йырҙарҙың
Ҡунаҡта булғаны бар.
Оҙатыу, ҡаршылауҙарҙы
Аҙ күрмәгәнбеҙ инде,
Шулай ҙа онотоп булмаҫ
Ошо бер ҡышҡы көндә.
Ҡышҡы һауа, ҡарҙар яуа.
Көнө лә һалҡын ғына.
Өфөлә поезд туҡтаны,
Туҡтаны талғын ғына.
Вагондан сыға яҡташтар,
Алыҫтан дуҫтар ҡайтҡан,
Банандар бешеп ултырған,
Пальмалар үҫкән яҡтан.
Һәм перрон йәнләнеп китте,
Гүйә йәй килде беҙгә,
Әйтерһең көньяҡ ҡояшы
Йомарт нурҙарын һибә.

Башкортостан халк бейеүҙәре ансамбле Вьетнам Халк демократик республикаһына барып кайтттты.

Һауаны гүйә йылытты
Дуҫтарҙың йылмайыуы,
Гүйә эҫелегә кайтты
Вьетнам кырҙарының.
Якташтар алыҫ дуҫтарҙың
Килтерҙе көләүҙәрен,
Уларҙың дәртле йырҙарын,
Тыйнаклы бейеүҙәрен.
Ғинуармы был, июлмә әллә —
Танып булмай Өфөнө,
Дуҫтар менән килгәнме әллә
Ханойҙың эҫе көнө?
Юк араның алыҫлығы,
Юлдарҙың оҙонлоғо,
Һыуык кышты ла йөй яһай
Дуҫлыктың йылылығы!

Рамғил.

БАШКОРТ
[illegible]

Бына начальник бүлмәһе..
Түрҙә үҙе ултыра.
Өс-дүрт телефон шылтырай.
Секретарь югереп тора.

Өмөтбаев — иғтибарлы,
Һәр һүҙгә ҡолаҡ һала.
Иптәштәрҙең тәкдимдәрен
Дәфтәргә яҙып бара.
— Тәҡдимең, ти, бик ҡиммәтле,
Күрербеҙ берәр сара.

Ҡаршы ала йылмайып ул,
Үтенес менән килһәң,
Иренмәй, туҡтап һөйләшә,
Әгәр урамда күрһәң.
— Эштәр нисек, һәйбәтме? — ти,—
Елкәңә һуғып ала,
Ҡиткән саҡта ҡабат-ҡабат
Ҡулыңды ҡыҫып ҡала...
— Тәҡдимең, ти, бик ҡиммәтле,
Сара күрербеҙ тиҙҙән.
Берәй аҙнанан инеп сыҡ,
Эш ҡалмаҫ инде беҙҙән.

Ышанып Өмөтбаевҡа
Аҙналар, айҙар үтә.
Тыныслығыңды юғалтып
Арыйһың көтә-көтә...

Түҙмәйһең, тағы киләһең
Начальнигең янына.
Ултыра ул келәм йәйгән
Өр яңы диванында.

Ғәфү үтенә ҡосаҡлап:
— Эш тормай инде беҙҙән,
Тикшерербеҙ, һөйләшербеҙ,
Сара күрербеҙ тиҙҙән.

Ш. Маҡулов.

Өфө һәм Черниковск калаларында газопровод траншейҙәре оҙак йылдар буйына казылган килеш калганлыктан, йөрөргә рәттә калмәй.

А. ФАДЕЕВ һүрәте.

— „Уф... уф... горгазға“ хәбәр итегеҙсе, минең ярҙамсыны ярҙамға ебәрһендәр.

Ауыл йоҡлай. Тик ара-тирә эт өргән тауыш ишетелеп ҡала. Ҡайҙалыр бала этәс һаташып ҡысҡырып ҡуя.

Шул ваҡыт Фәрхетдин ҡарттарҙың аҙбарында ҡапыл ҡош-ҡорт тауышы күтәрелде: тауыҡтар ҡытҡылдашты, өйрәктәр баҡылдашты. «Аҙбарға төлкө-маҙар индеме икән?» — тип уйланы хужа. «Төлкө-маҙар» тип әйтеүенең сәбәбе шунда: ауылға ҡайһы ваҡыт бүре лә килеп сыҡҡылай торғайны. Ҡарт ауыҙ эсенән генә һуҡранды ла, иренеп кенә тышҡа сыҡты. Ҡолаҡ һалып тыңланы: бәй, ике аяҡлы бүре түгелме һуң? Был ни ғәжәп! Хәҙер йорт баҫып йөрөй торған заманалар үткән бит инде. Ҡарт, үҙ күҙенә ышанмай, аҙбарға яҡыныраҡ барҙы. Эйе, эйе, аҙбар эсендә ысынлап та «ике аяҡлы бүре.» Ҡарт, аҙбар ишеген тыш яктан бикләне лә, күрше-күләнгә хәбәр итте.

Шау-шыу килеп халҡ йыйыла башлағанда «ике аяҡлы бүребеҙ» ишекте ватып сыҡҡайны инде. Уны шунда уҡ танып алдылар: ул колхоз эшенән ҡасып, еңел табыш эҙләп йөрөүсе Нури Фәйзуллин ине. Ул Сөләймәнов Фәрхетдин ҡарттың өйрәктәренең муйынын бороп тоғона тултырған. Ҡулында һунар мылтығы.

— Китегеҙ!..— тип екеренде «һунарсы»,— минең кем икәнлегемде белмәйһегеҙме ни әле?

— Беләбеҙ, ялҡау Нури,— тине кемдер.

— Мин һеҙҙе, мин танытырмын...— Ул тағы ниҙер әйтмәксе булғайны ла, әйтә алманы, буталды һәм өс тапҡыр атып ебәрҙе лә ҡасты.

Ҡасып ҡайҙа барһын инде?

Уның хаҡында милицияға хәбәр иттеләр, тейешле яза бирелеүен көттөләр.

Тик бына ошонда ғына колхозсылар уның: «Кем икәнлегемде белмәйһегеҙме ни әле?» — тигән һүҙенең мәғәнәһен аңланылар. Ул милицияның Ҡандра район бүлеге начальниге майор Әхмәт Әбдрәхимов һәм оперуполномоченный Нурислам Ғәзиевтәрҙең йылы ҡанаттары аҫтына һыйына икән.

Ҡолхозсылар енәйәтсенең яуапҡа тарттырылыуын күпме генә талап итеп ҡараһалар ҙа, был тәртип һаҡлаусы ике эшем кешеһе: «Ваҡ мәсьәлә, уның өсөн яуапҡа тарттырып булмай»,— тип кенә ҡуялар.

Ә Нури Фәйзуллин мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп йөрөй бирә: «Беләһегеҙме, мин кем?» — ти.

Фәйзуллин — енәйәтсе, Ә Әбдрәхимов менән Ғәзиев кем булып сыға?

Х. Йосопов.

СИРАТТАҒЫ ОТПУСК

Ҡарғалының клубы бар —
Ал да гөл биналары.
Бинаһы бар, сәхнәһе юҡ —
Күренмәй киналары.

Благовар районы Ҡарғалы ауылы йәштәренең ошо йырында дөрөҫлөк бар. Үткән йыл клуб бөтөнләй эшләмәне тиерлек — уны ремонтланылар. Ә ремонт тамамланғас, 12 ай буйы эшһеҙ йөрөп арыған клуб мөдире иптәш Дистанова отпускыға китте.

Хәҙер Ҡарғалы ауылы йәштәре иптәш Дистанованың отпускыһы бөткәс, тағы ла отпускыға китеүенән ҡурҡалар.

З. СӨНДӨКОВ.

А. ШТАБЕЛЬ һүрәте.

Өфө кино-театрҙарында балалар өсөн булған сеанстарҙа йыш ҡына балалар йәшенә хас булмаған фильмдәр күрһәтелә.

ПРОМКАБИНЕТ

Промкомбинат конторaһының коридорындағы ағас скәмйәлә ике кеше һөйләшеп ултыра. Уларҙың береһе — Бүздәк промкомбинатының конюхе Әхмәдулла, икенсеһе — итексе Гарабес. Әхмәдулла төрөпкәһенән төтөн борхоттола, аҡрын ғына:

— «Яңы һепертке таҙа һеперә» тигәндәре дөрөҫ шул,— тине.

— Ни хаҡта әйтәһең? — тип һораны итексе, ҡултығына ҡыҫтырған иҫке итеген скәмйәгә һалып.

— Директор хаҡында,— Әхмәдулла хәйләкәр генә йылмайып ҡуйҙы.

— Ни булған?

— Күрмәйһеңме ни? — конюх промкомбинат директоры Асанов кабинетенә табан ымлап күрһәтте.— Яңы хужа кабинетте ниндәйерәк эшләтеп ебәрҙе бит. Ундай кабинет ҡайһы бер министрҙең төшөнә лә ингәне юҡтыр әле.

— Н-да...— тип баш ҡаҡты Гарабес.— Яңы директор килгәс, беҙҙең промкомбинат промкабинетҡа әйләнде инде. Шул кабинетта кәңәшмә лә кәңәшмә, күрһәтмә лә бойороҡ. Ә цехтарҙа эш бармай.

— Иптәштәр! Промкомбинаттың итек тегеү цехы ҡайҙа икән? — тигән тауыш был икәүҙең әңгәмәһен бүлдерҙе.

— Бына итек тегеү цехы, мин булам,— тине итексе Гарабес.

Теге кеше Гарабесҡа ҡарап:

— Мин һеҙҙең менән шаярырға килмәнем. Белмәйһегеҙ икән, «белмәйбеҙ» тип әйтегеҙ,— тип асыуланды.

Итексе уңайһыҙланып көрһөндө.

— Их, иптәш. Дөрөҫө шулай шул. Элек цех бар ине. Хәҙер юҡ. Яңы хужа цехты яптырҙы ла итекселәрҙе өйҙәренә таратты. Шуларҙың береһе мин булам инде. Шуға күрә мин үҙемде цех тип әйтергә хаҡлымын,— тине.

— Аяҡ кейемдәре ҡайҙа төҙәтелә һуң? — тип һораны теге кеше.

— Әйтеп торам бит: өйҙә, һәр итексенең үҙ өйөндә.

Теге кеше ҡулын һелтәп, ниҙер мығырҙанды ла асыуланып ишеккә табан атланы, ишектән инеп килеүсе ҡыҙға барып бәрелгәс, ғәфү үтенеп, сығып китте.

— Фотография сәғәт нисәлә асыла икән? — тип һораны ҡыҙ, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына.

— Ҡайһы, бынаумы?

— Эйе.

— Ул бөтөнләй асылмай.

— Ни эшләп?

— Унда директорҙың квартираһы буласаҡ.

— Ә фотография ҡайҙа һуң?

— Фотограф Анрияшиндең өйөндә.

Ҡыҙ ғәжәпләнде:

— Нисек аңларға инде?

— Шулай аңларға кәрәк. Уның өсөн бер ҙә насар түгел. Үҙ өйөндә үҙе хужа, үҙе баш. Үҙе төшөрә, үҙе аҡса ала. Шунан тағы ла төшөрә...

Ҡыҙ уңайһыҙланып йылмайҙы ла сығып китте.

Хәҙер инде тауышланып парикмахер Әминә килеп инде.

— Директор үҙендәме?

— Үҙендә шикелле. Ни булған?

— Ни булһын, нисә һөйләһәң дә әлеге бер балыҡ башы инде. Берҙән-бер цехтағы берҙән-бер салфетҡа көнө буйы керләнеп бөтә. Әле бер клиент тотолмаған салфетка һорағас, «юҡ», тигәйнем, асыуланып, ҡырынмайынса сығып китте. Нисек итәйем һуң инде? Беҙ гәйеплеме ни? — тип зарлана-зарлана контораға инеп китте.

Шулай итеп киләләр ҙә зарланалар, зарланалар ҙа китәләр. Берәү егерме өс мең һумға төшөрөп һалынған мейес, уның тәүге ярыуҙа уҡ емерелеүенең сәбәптәре тураһында, икенсеһе ватыҡ тирмән хаҡында, өсөнсөһө эшләмәй ятҡан таҡта ярыу рамаһы тураһында һөйләй.

Былай булғас, ҡайҙа табан һеперә һуң был «яңы һепертке»? Беҙҙә: «промкомбинатты һепереп ҡуймаһын» тигән шик тыуа. Күрәһең, хөрмәтле директор Асанов шундай хәҡиҡәткә төшөнөп етмәйҙер: промкомбинат уның югәнһеҙ теләктәрен үтәү өсөн түгел, ә халыҡ ихтыяждарын хеҙмәтләндереү өсөн йәшәй бит.

И. ЕНИКЕЕВ.

В. ПОНОМАРЁВ һүрәте

Күп кенә осрактарҙа ғилми эшкә һәләтле булмаған кешеләр ғилми эш менән шөғөлләнәләр. Ләкин фән өсөн уларҙың бер файҙаһы ла юк. **(Газеталарҙан.)**



КАНДИДАТЛЫҠКА КАНДИДАТ

ҒӘЖӘП ХӘЛ

Ҡырмыҫҡалы районы Салауат исемендәге колхозда мал аҙығы менән эштәр бик мөшкөлләнгәс, председатель урынбаҫары Крупинов йәй һалып ҡалдырған силос соҡорҙарын эҙләп сығып киткән дә юғалған. Колхозсылар уны эҙләй сыҡҡандар. Эҙ һөтсөлөк фермаһы эргәһенә алып барған. Ҡараһалар, ни күрһендәр! Крупинов силосы күптән сереп бөткән соҡорҙоң береһенә убылып төшкән дә, сыға алмайынса ята икән. Ярҙам бик ваҡытлы булып сыҡҡан, ти.

Уҫал телдәр Крупинов соҡорҙа ятҡан саҡта киләһе йылда малдарға етерлек аҙыҡ булдырыу тураһында ла, силосты яҡшылап һалыу тураһында ла бик ныҡ уйланған һәм үҙен-үҙе шелтәләгән имеш, тип һөйләйҙәр. Тик шуныһы, соҡорҙан сыҡҡас та ул тағы ла онотманымы икән? Беләһе ине.

К. Ирек.

КҮСМӘ ҺӨНӘР

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Был һүҙ Хажиәхмәтов хаҡында әйтелмәнеме икән? Ул, әлбиттә, егет йәшенән уҙған. Шулай ҙа һөнәре яғынан аптырап тормай. Ул үҙе юрисконсультант. Ләкин Башҡортостан Юстиция министерствоһына ингәне бирле дүрт һөнәр алыштырҙы. Тәүҙә уны шофер ярҙамсыһы итеп алдылар. Ике — өс ай ҙа үтмәне, инженер вазифаһына күсерҙеләр. Унан һуң административ-хужалыҡ бүлеге начальниге булды, ун — ун биш көндән — канцелярия начальниге иттеләр. Инде тиҙҙән прораб итеп ҡуялар имеш, тигән хәбәр йөрөй.

Һөнәре булғас эшләр инде, тип уйламағыҙ тағы, эш һөнәрҙә түгел — танышлыҡта. Шулай булғас, министерство уның өсөн тағы ла әлләниндәй вазифалар табыр әле.

Ш. Ҡазыханов.

АШЫҠМАЙ ҘА, БЕШМӘЙ ҘӘ

Һеҙ Байҡыбаш район үҙәгенең төп урамына килеп инһәгеҙ, ҙур, киң тәҙрәләре, һырлап, биҙәлеп эшләнгән ишек алды менән көньяҡҡа ҡараған күркәм генә бина күҙегеҙгә ташланыр. Ишек башына ҡаҙаҡланған саманан тыш ҙур таҡтала эре хәрефтәр менән яҙылған «Чайная» һүҙен уҡыу менән танауығыҙға тәмле аш еҫе бәрелгән кеүек булыр. Билдәле, һеҙ ашығып шунда табан атлайһығыҙ. Ләкин... инергә ашыҡмағыҙ. Уның ишегендә һәр көн түбәтәй ҙурлығы йоҙаҡ эленеп тора. Шуға күрә икенсе ай инде райпотребсоюз председателе Афанасьев үҙе лә кухнялә генә ашап-эсеп сыға.

Үткән йәй сәйхана бинаһына ике ай буйы капиталь ремонт, ә көҙ еткәс, ай ярым самаһы ағымдағы ремонт үткәрелде! Ишектән йоҙаҡ алынды — ишек асылды. Унда барлығы 5 өҫтәл, 11 ултырғыс булыуына, талон алыу өсөн һуҙылған оҙон сиратта тороуҙарға, унан һуң инде талон да, икмәк тә һалынған тәрилкәне тотҡан килеш, иҙән уртаһына баҫып ултырғыс бушағанды тилмерешеп көтөүҙәргә, менюлә күп ваҡыт сәй генә булыуына ла ҡыйынһынмай инек. Ләкин ҡыш башланғас... тағы яптылар.

Хеҙмәтсәндәрҙең һорауына Афанасьев ғәҙәттән тыш татлы тел менән:

— Күрәһегеҙ бит, егеттәр, рәтләйбеҙ,— тип яуап бирә,— ашыҡмағыҙ, ашыҡҡан ашҡа бешкән тиҙәр.

Иптәш Афанасьев бер ваҡытта ла ашҡа бешмәҫ, сөнки бешеү өсөн ҡайнар аш кәрәк. Ҡайнар аш булһын өсөн Афанасьевте ашыҡтырыусылар табылырмы икән?

Ғ. Лоҡман.

Көҙерле Һәнәк!

Һәнәк иптәш!

Борай район үҙәгендә берҙән бер мунса бар, ул да аҙнаһына бер генә көн — йәкшәмбе көнө генә эшләп килде. Унда йыш ҡына эҫе йәки һыуыҡ һыу булмауҙан, йәки сәғәттәр буйы сиратта тороуҙан интегә инек. Район коммуналь хужалығы мөдире Янбарисов хәҙер был мәшәҡәттән беҙҙе бөтөнләй ҡотҡарҙы: уны ябырға бойороҡ бирҙе.

Һин, Һәнәк иптәш, хәҙер район үҙәгендә йәшәүселәр ҙә, иптәш Янбарисов үҙе лә мунса кермәйҙәрме икән тип, ғәжәпләнерһең. Иптәш Янбарисовтың бойороғонан һуң да кешеләр, ни эшләһен, мунсала йыуынмай булдыра алмаҫтар бит. Ләкин йыуыныуҙың хәҙер саҡ ҡына бер айырмаһы бар: элек уға сиратта тороп, 2—3 сәғәт ваҡыт үтһә, хәҙер бөтә көнөң китә. Башта мунсалы кешене табырға кәрәк, һорарға кәрәк (ярай әле ул рөхсәт итһә), яғырға кәрәк, һыу ташырға кәрәк... Улай ғынамы, уның эҫеһе мунсаның хужаһына ла, Янбарисовҡа ла етергә тейеш. Әгәр ҙә иптәш Янбарисҡа ла эҫеһе етә икән, коммуналь мунса тураһында ҡайғыртыуҙың ни кәрәге бар.

Һәнәк иптәш, Янбарисовҡа икенсе төрләрәк мунса ойоштороусылар табылмаҫмы икән?

С. Әхмәт

Һәнәк дуҫ!

*«Лес — Родине» газетаһында баҫылған «Лесная быль» тигән хәбәрҙе (1956 йыл, 11 ғинуар, № 3) уҡыусыларға аңлатып биреүеңде үтенеп һорайым. Унда Тюйно-Озеро леспромхозының начальнигы Н. М. Михалев тураһында яҙылған. Уны мин генә түгел, газетаның редакторы Д. А. Гырдасов иптәш үҙе лә аңл**амай торғандыр. Бына, уҡып ҡарағыҙ:*

> Двери в гараже не закрываются, стекол нет. Погулял я там славно. Посмотрел автохозяйство. Все мне по душе пришлось: до 50 процентов газогенераторных мана неделю. Придется мне вас шин простаивает, потому что сырая газочурка, да и той только порумянить того-с, холодком.

Аңлашыламы?

А. В. Гнездилова,

Красная Горка, Нуриман районы.

Эйе, эйе, иптәш Гырдасов, бында һалҡынлыҡ һиҙелеп тора. Һеҙгә лә ниме, того-с, ҡыҙарырға тура килмәҫме?

Һәнәк.

ХАТТАР ЭҘЕНӘН

Стәрлебаш район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Садыҡов маслопром управляющийы иптәш Ғатауллиндең насар эшләүе тураһында «Һәнәккә» яҙылған хаттағы факттар раҫланды, Ғатауллин эшенән бушатылды, тип хәбәр итә.

* * *

Саҡмағош район үҙәгендәге хужалыҡ тауарҙары магазинында совет сауҙаһы тәртиптәренең боҙолоуы тураһында редакцияға килгән хат райпотребсоюз правлениеһы ултырышында тикшерелде.

Совет сауҙаһы тәртибен боҙған өсөн магазин мөдире иптәш Нурисламовҡа ҡаты шелтә бирелде.

* * *

Черниковск ҡалаһының 4-се номерлы техник училищеһы уҡыусылары форма өсөн бирелгән гимнастеркаларҙың насар сифатлы итеп тегелеүе тураһында яҙғандар ине. Башшвейкожпромсоюз правлениеһы председателе иптәш Лазарев беҙгә, хатта күрһәтелгән факттар дөрөҫләнде, тип хәбәр итте. Урында тикшереү һөҙөмтәһендә «Швейпром» артелендә тегелгән гимнастеркаларҙа ысынлап та техник талаптар һаҡланмағанлығы асыҡланды.

Тикшереү һөҙөмтәһе «Швейпром» артеле правлениеһы ултырышында ҡаралып, унда тегелгән кейемдәрҙең сифатын яҡшыртыу саралары билдәләнде. Түбән сифатлы кейемдәр тегеүгә юл ҡуйғаны өсөн «Швейпром» артеле начальнигы иптәш Теняеваға шелтә бирелде, ә техник контроль бүлеге начальнигына иҫкәртелде.

ӨФӨЛӘГЕ ҺЫУ КОЛОНКАЛАРЫ ЯНЫНДАҒЫ КҮРЕНЕШТӘР

С. КИПРИН һүрәте.

Аҡмаһа ла тама

Аҡмай ҙа таммай ҙа

Редактор Н. НӘЖМИ. Редколлегия: С. АГИШ, Ғ. АЛМАЕВ, Ғ. ӘХМӘТШИН, Р. ҒүМӘРОВ, А. ДОБРЫЦИН, Х. КӘРИМ, Ш. НАСЫРОВ, Ғ. РАМАЗАНОВ.

Өлкә газеталар издательствоһы. Редакцияның адресы: Өфө, Пушкин урамы, 85.
Телефондар: №№ 2-87-43, 2-91-02, 2-52-82. Хаттар ебәреү өсөн адрес: Уфа, почт. отд. № 14.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 2/IV 1956. Ҡағыҙ форматы 70×108¼ 1,5 баҫма табаҡ. П 00254. Заказ № 192. Тираж 10 000 + 37.

А. ШТАБЕЛЬ һүрәте

ӨФӨ УРАМДАРЫНДА АВТОБУС ХӘРӘКӘТЕ

Иртән



Көндөз

Кис